**МИНИСТЕРСТВО ПРОСВЕЩЕНИЯ РОССИЙСКОЙ ФЕДЕРАЦИИ**
**Министерство образования и науки Республики Башкортостан**
**Муниципальное казенное учреждение отдел образования**
**муниципального района Республики Башкортостан**
**МБОУ Полилингвальная многопрофильная школа №9**
**МР Учалинский район РБ**

| РАССМОТРЕНО | СОГЛАСОВАНО | УТВЕРЖДЕНО |
|---|---|---|
| Заседание ШМО учителей начальных классов | Заместитель директора по УВР Хайретдинова Г.Л. | Директор Мухамедьярова Э.Ф. |
| Байрамгалина З.Ш. Протокол №1 от «31» августа 2023 г. | | Приказа №27 от «31» августа 2023 г. |

# РАБОЧАЯ ПРОГРАММА

курса внеурочной деятельности
для обучающихся 1-4 классов

**«Читаем «Урал батыр»**

Учалы — 2023

Баш һүҙ

Тәрбиәле кеше, тәрбиәле быуын – тәрбиәле йәмғиәт, ышаныслы бөгөнгөбөҙ, өмөтлө киләсәгебеҙ ул. Шуның өсөн мәктәптәрҙә, гимназияларҙа һәм лицейҙарҙа, шулай уҡ башҡа уҡыу йорттарында ла төплө белем биреү менән бер рәттән уҡыусыла кешелеклелек һыҙаттары, әҙәплелек тәрбиәләү мөҡәддәс бурыс һынала. Ә кеше үҙ халҡының быуындан быуынға күсә килгән рухи байлығына эйә булғанда, физик камиллыҡҡа өлгәшкәндә һәм әхләҡи сафлыҡҡа ынтылғанда ғына үҙен тәрбиәле, әҙәпле, мәҙәниәтле, йәмғиәттең тулы ҡанлы ағзаһы итеп иҫәпләй ала. Фәҡәт сәләмәт рухлы кеше генә йәмғиәтебеҙ, халҡыбыҙ өсөн ниҙер эшләй, уның алға китеүенә тос өлөш индерә ала.

Икенсе быуын хөкүмәт стандарттарының талаптарына ярашлы бала белем алыу менән бер рәттән яңы йәшәү шарттарына яраҡлы тормош тәжрибәһе тупларға, уңышлы уҡыусы һәм эшмәкәр шәхес сифаттарына эйә булырға тейеш.

Бала туған телендә аралаша, тирә – яғындағы донъяны танып белә. Башланғыс класҡа килгәс, тәү башлап уҡырға, яҙырға өйрәнә. Тик бында бер мәсьәлә килеп тыуа: ҡала мөхитендә үҫкән бала башҡорт телен белмәүе һәм туған теле булараҡ йөрөтмәүе, көн кеүек асыҡ. Милли мәктәп уҡыу программаһына ярашлы, ҡалған предметтар менән бер рәттән башҡорт телен предмет булараҡ өйрәнә башлай.

Уҡыу программаларының көнүҙәк темалары булып: тыуған илебеҙ Рәсәй, республикабыҙ Башҡортостан һәм уның халҡы, башҡорт халҡының тарихы, йола һәм ғөрөф – ғәҙәттәре, мәҙәниәте, тәбиғәте өйрәнелә. Ҡала мөхитендә үҫкән балаға башҡорт халҡының тарихына, йолаһына һәм ғөрөф – ғәҙәттәренә, мәҙәниәтенә, тәбиғәтенә ҡыҙыҡһыныу уятыу һәм маҡсатҡа ирешеү өсөн уҡыу программаһы сиктәренән сығып, тәрбиәүи эш планында был йүнәлештә эште дауам итергә кәрәк.

Ундай тәрбиәгә өлгәшеүҙә һәр халыҡтың үҙенең һыналған тәрбиә ҡанундары – халыҡ педагогикаһы ҙур роль уйнай.

Халыҡ педагогикаһы – кешелек донъяһы барлыҡҡа килгәндә үк тыуған ғилем. Һәр заман үҙе туплаған аҡыл, тәжрибә нигеҙендә үҙен алмаштырасаҡ быуынды һәйбәтерәк, зиһенлерәк, аңлыраҡ, юғарыраҡ, зауыҡлыраҡ итеп тәрбиәләргә тырышҡан, уның өсөн бөтә көсөн, ғилемен һалған. Шул нигеҙҙә кешелек донъяһы үҫә, камиллаша, алға бара.

Башҡорт халҡының иң боронғо ҙур эпик төрө – ул халыҡ эпосы. Халыҡ эпосы боронғо тормошто йәки тарихтағы мөһим ваҡиғаларҙы фантастик формала киң масштаблы итеп һөйләп биреүе менән айырылып тора. Башҡорт халыҡ эпостарының иң ҙуры һәм иң күренеклеһе – “Урал батыр” эпосы.” Урал батыр” эпосын башланғыс кластарҙа өйрәнеүҙең төп маҡсаттарының береһе – Шәхес тәрбиәләү.Үҙ халҡы, милләте, тарихы менән ғорурлана алған, халыҡтың йыр – моңон күңеленә һеңдергән, тыуған ерен ғәзиз әсәһе кеүек күргән, халыҡтың рухы, маҡсаты, уй – хыялдары, үткәне, бөгөнгөһө, киләсәге менән йәшәгән һәм туған теленең ҡәҙерен белеп, уның тотош байлығына эйә булып, шул телдә уйлаған, хыялланған, ижад иткән, үҙенең бар булмышын халҡына бағышлаған кеше генә Шәхес була ала. Ҡобайыр халыҡ аңындағы бөйөк рухлы, ныҡлы ихтыярлы, изгелекле, яуызлыҡҡа ҡаршы бөтә ғүмере буйынса көрәшеүсе һәм еңеүсе Урал батыр образын тыуҙырыуы менән ҡиммәт. Урал батырҙың көрәш маҡсаты бөгөнгө заман өсөн дә әһәмиәтле. Был- кешелектең йәшәү мәғәнәһе, ер тормошо, тыныслыҡ проблемаһы. Ер йөҙөндәге һәр кешенең бурысы – был донъяла үҙенә лайыҡлы урын табыу, дөйөм кешелектең йәшәйешен, үлемһеҙлекте дауам итеү.

Был поэтик ҡомартҡы йәш быуында тарихи һәм милли үҙаңды үҫтереүҙә айырыуса әһәмиәтле.

Әҫәрҙең төп идеяһы булып тәбиғәт стихияһы алдында кешенең еңелмәҫ бөйөк батырлығын данлау, тәбиғәт менән кешелектең мәңгелеген раҫлау тора.

“Урал батыр” эпосын өйрәнеү түбәндәге маҡсаттарҙы ҡуя:

-башҡорт теленән баланың һүҙлек запасы самалы булыуын иҫәпкә алып, темаға ярашлы эштәр башҡарыу. Һәр дәрестә өндәрҙе дөрөҫ әйтеү күнекмәләрен ҡабатлау.

- һәр дәрестә өйрәнелгән яңы һүҙҙәрҙе баланың әүҙем телмәренә индереү өсөн төрлө һүҙбәйләнеш, һөйләмдәрҙә ҡабатлап, иҫкә төшөрөү мотлаҡ.

- әҫәр геройҙарының ҡылыҡ- фиғелдәрен баһаларға, әҙәби геройҙар өлгөһөндә яҡшыны насарҙан, изгелекте яуызлыҡтан, ярҙамды хаслыҡтан, мөхәббәтте нәфрәттән айырырға, кеше психологияһын тойомларға, төрлө ыңғай әҙәби сюжет ситуациялары өлгөһөндә үҙ-ара мөнәсәбәт ҡороу оҫталығына өйрәнеү.

Был маҡсаттарға ирешеү өсөн эште ойоштороу.

Бәләкәй генә бер өҙөктө уҡығандан һуң, уның оҡшау-оҡшамауы асыҡлана. Ошо йөкмәтке менән танышҡас, йәнле аралашыу өсөн шарттар тыуа: был өҙөктә һүҙ кемдәр тураһында бара? Был ваҡиға ҡайҙа булған? Һиңә теге йәки был герой оҡшаймы?

Тексттың йөкмәткеһен үҙләштергәс, тәьҫораттарға, кисерештәргә таянып, фекер алышыу үткәреләә.

Текст йөкмәткеһе буйынса темаға ярашлы ижади эштәр тәҡдим ителә: һүрәт төшөрөү, пластилиндан әүәләү, кроссворд төҙөү һәм сисеү; яҡшылыҡ, изгелек хаҡында мәҡәл һәм әйтемдәр йыйыу.

Халҡыбыҙҙың мәшһүр эпосында хикмәтле, серле һандар, ҡабатлауҙар бар. Әҫәр буйынса “Һандар иленә сәйәхәт” ойоштороу эше балала эҙләнеүҙәр, сағыштырыуҙар, яңы мәғлүмәт алыу ысулын аса. “Урал батыр” эпосында ике, өс, дүрт, ун ике һандары йыш ҡабатлана.

Текстағы герой булып уҡыу алымы баланы герой роленә инеп ижади йүнәлештә эшләүҙе талап итә. Был эш ҡатмарлы ла, мауыҡтырғыс та. Бындай ижади эш балаларҙың үҙҙәрен герой ролендә һанап ҡарарға әйҙәй.

Сәхнәлә уйнау, хәл-ваҡиғаны, сюжетты театрлаштырыу онотолмаҫ һоҡланыу хисе уята һәм эш һөҙөмтәһен күрһәтә.

Өҙөктәрҙе яттан һөйләй белеү баланың хәтерен нығыта, уҡыу техникаһын камиллаштыра, һөйләү һәм аралашыу телмәрен үҫтерә.

Программаһының төп принциптары.

1.Һәр баланың шәхси үҙенсәлектәрен иҫәпкә алыу.

Тәҡдим ителгән программаны хөкүмәт стандарттары нормаларына яраҡлаштырып ҡороу күрһәтелгән принципты тормошҡа ашырыуға мөмкинселек бирҙе. Хөкүмәт стандарттары талаптарына

ярашлы шәхси үҫеште программаға таянып, балалар өсөн төрлө интеллектуаль кимәлдәге эштәр менән тәьмин итеү бурысы тора. Был төрлө кимәлдәге үҫеш менән уҡырға килгән һәм шулай уҡ тәбиғәттән төрлө аң – аҡылға эйә булған балаларҙы программа йөкмәткеһен

үҙләштереүҙе уның шәхси мөмкинселектәрен, булмышын иҫәпкә алып ойоштороуға булышлыҡ итәсәк.

2.Фәнни – теоретик белем биреү.

Әҫәрҙе өйрәнеүҙе төп фәнни- теоретик төшөнсәләрҙе үҙләштереүгә нигеҙләп ҡороу. Төшөнсәләрҙе баланың аң- зиһен кимәлен, фекерләү ҡеүәһен үҫтереү, аралашыу оҫталығын шымартыу объекты итеп ҡулланыу.

3.Һәр баланы төрлө яҡлап өҙлөкһөҙ үҫтереү.

Был принцип баланы аҡыллы,эмоциональ-эстетик,рухи-әхләҡи, һау-сәләмәт йәшәргә өйрәтә. Тимәк, уҡытыусы ошо йүнәлештәрҙә тейешле шарттар булдырырға бурыслы.

4.Баланың тәбиғәттән бирелгән, ата-бабалары булмышынан күскән ыңғай сифаттарын иҫәпкә алыу.

Балаға тәбиғәттән бирелгән йәки ата-бабаһынан күскән аң, зиһен, фекерләү, эмоциональ булмыш, телмәр сфераларындағы ыңғай һыҙаттарҙы күтәреү, уларҙы иҫәпкә алып, баланың аҡылын үҫтереүҙе тормошҡа ашырыу. Башҡорт милләтенә, халҡына хас яҡшы сифаттарҙы нығытыу, дауам итеү.

5.Баланың психик һәм физик һаулығын һаҡлау, нығытыу.

Бының өсөн махсус рәүештә программа материалы нигеҙендә уҡыу ситуациялары тыуҙырыу, баланы уйнатып, уйландырып, мауыҡтырғыс итеп үткәреү талап ителә.

Бәләкәй бала һөйләшеүгә әүәҫ. Беренсе класҡа килгән алты – ете йәшлек баланың да һөйләшеүгә дәрте ҙур. Уның ошо теләген иҫәпкә алып, фекерен, телмәрен үҫтереү өсөн тейешле шарттар тыуҙырыу мөһим. Бер партала ултырған ике уҡыусы үҙ – ара һөйләшергә, фекер алышырға тейеш. Улар ғаиләһе, ата – әсәһе, туғандары тураһында, өйҙәге, мәктәптәге эштәре буйынса ла һөйләшәләр. Уҡыусы үҙ уйын тартынмай әйтеп бирһен өсөн, шарттар булдырыла. Бала уҡытыусыға ла һорау ҡуйырға баҙнат итә. Уҡыған текстың йөкмәткеһен аңлағас, ул был әҫәр буйынса иптәшенә һорауҙар бирә башлай. Һорай белеү, һорау ҡуя белеү, йәғни үҙең белмәгәнде асыҡларға баҙнат итеү юғары баһалана.

Икешәр, дүртәр – бишәр уҡыусы төркөмдәргә бүленеп эшләгәндә, бала һорау бирергә, фекерен үҙенсә әйтергә һәм яҡларға, кешенең әйткәнен иғтибар менән тыңлап, уны баһаларға әкренләп өйрәнә башлай. Уй – фекерен аныҡ итеп әйтергә кәрәклеген төшөнә, иптәштәренә лә иғтибарлы була бара.

“Урал батыр” эпосындағы тәрбиәүи саралар.

-йәш быуында тарихи һәм милли үҙаңды үҫтереү;

- тәбиғәттә бөтә тереклек берҙәм;

- тәбиғәт байлыҡтарын һаҡсыл файҙаланыу;

- тыуған ереңә һәм ғәзиз халҡыңа изгелек эшләү;

- ата һүҙен тотоу, кешелеккә хеҙмәт итеү;

- ғаиләлә татыулыҡбулдырыу, атайҙарҙың ғаилә тераге генә түгел,ил тераге лә икәнлеген аңлатыу;

- милли ғорурлыҡ, үҙаң, милли хәтер һәм әҙәплелек тәрбиәләү;

- бала күңеленә нәфислек, гүзәллек, матурлыҡтытоя һәм баһалай белеүҙе һеңдереү;

- ил тераге булған батырҙарға, ил ағаһы булыр аҡһаҡалдарға ихтирам тәрбиәләү;

4-се класс аҙағына планлаштырылған һөҙөмтәләр:

1.Тыуған ил, туған тел матурлығын, күркәмлеген тоя белергә, уларҙы һаҡларға, үҙ халҡының традицияларын, йолаларын өйрәнергә, таратырға;

2.Туғанлыҡ атамаларын белергә, туғандары менән ошо атамаларҙы ҡушып аралашырға, башҡортса һөйләшергә;

3.Ғаилә усағының йылылығы, ишле ғаиләнең өҫтөнлөгө, татыулыҡтың, дуҫлыҡтың әһәмиәте низә икәнлеген белергә һәм ошо тойғоларҙы һаҡларға;

4.Тәбиғәт менән Кеше араһындағы тығыҙ бәйләнеште аңларға, “Кешелек донъяһының артабанғы йәшәйеше үҙебеҙҙең ҡулда һәм фәҡәт тәбиғәткә ҡарата һаҡсыл мөнәсәбәттә

булһаҡ ҡына, беҙ сәләмәт, күркәм тормош алып барасаҡбыҙ, Ер тип аталған изге төйәгебеҙҙең йәшәү дәүерен оҙайтасаҡбыҙ”,-тигән төшөнсәне аңларға, зиһененә һеңдерегә тейеш.

Программаны үҙләштереү

Уҡыусы белергә тейеш:

-нимә ул тәбиғәт ? тәбиғәтте һаҡлау – ул кешелек донъяһын һаҡлау, тигәнде аңлата. Тәбиғәттең байлығын ишәйтеүгә һәр беребеҙ өлөш индерә алабыҙ.

-башҡорттарҙың тәбиғәтте изгеләштереүе һәм йәнләндереүе, ошо нигеҙҙә әҙәпкә өйрәтеүе.

-Урал батырҙың ни өсөн тере һыу эсмәгәнен аңлау;

-халыҡтар араһында йылы мөнәсәбәт ни өсөн кәрәк һәм уны нисек һаҡлап була? Халыҡтар дуҫлығы тураһында мәҡәлдәр һәм уларға аңлатма биреү.

-халыҡтың изге йолаларын, ғөрөф-ғәҙәттәрен белеү һәм уларҙы боҙмау;

-матди байлыҡ менән рухи байлыҡтың айырылғыһыҙ булыуын, рухи байлыҡ сығанаҡтарын белергә тейеш.

Уҡыусы өйрәнергә тейеш:

-тәбиғәткә сығырға, үҫемлектәр донъяһы менән танышырға, тәбиғәткә ҡарата хәстәрлекле, һаҡсыл мөнәсәбәт тәрбиәләү сараһы күрергә;

-тәбиғәт һәр нәмәнең тейешле нисбәтен үҙе самалап-көйләп тора. Самаһыҙлыҡ - кешеләрҙең битарафлығы.Бер ағас ҡырҡһаң, икене ултырт мәҡәленә аңлатма биреү.

-йолаларҙа ғилми фекерләү сағылышы;

-әҫәрҙе ролдәргә бүлеп уҡыу, сәхнәләштереү.

Уҡыу йылына сәғәттәр һаны: бөтәһе 34 сәғәт, аҙнаһына 1 сәғәт.

Тематик планлаштырыу

| Курстың бүлеге, темаһы | Программа йөкмәткеһе | Сәғәттәр һаны |
|---|---|---|
| «Урал батыр» эпосы – башҡорт халҡының рухи йәншишмәһе | “Урал батыр” эпосы – иң боронғо эпик ҡомартҡы. “Урал батыр” эпосы – тәрбиә сығанағы. Урал батыр төйәге. | 3 |
| Образдар системаһы | Йәнбирҙе менән Йәнбикә образдары. Урал һәм Шүлгән. Тәбиғәттәге бөтә тереклек берҙәм. | 3 |
| Урал юлы | Йәншишмә – йәшәү сығанағы. Ҡоштар батшаһы Самрау. Һомай ҡош кем ул? Ҡатил батшалығы. Үгеҙ менән алыш. Урал Ҡәһҡәһә батшалығында. Дейеү батшаһы Әзрәкә. Һомай һарайы. Аҡбуҙат. | 10 |
| Йәшәү һәм үлемһеҙлек | Урал тауҙары. Нөгөш, Һаҡмар, Яйыҡ, Иҙел. Мәңгелек шишмәләр. Яҡшылыҡ – мәңгелек. | 5 |
| Практик эштәр | Эпосының һүҙҙәрен бүлеп биреү. Сәхнәләштереүгә әҙерлек эштәре. Эпостан өҙөктө ятлау. Ижади эштәр. | 10 |
| Йомғаҡлау | Изгелек ҡылыу, яҡшы эштәр эшләү. Атай ҡото ил һаҡлар. | 3 |

Ҡулланылған әҙәбиәт:

1.”Урал батыр” эпосы – тәрбиә сығанағы. Ғ.Д.Ибраһимов. Башҡортостан уҡытыусыһы – № 5- 2008.

2.Рухты быуыр мәкер. Р.Ю.Торомтаева. Башҡортостан уҡытыусыһы – № 2- 2009.

3.Башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижады. Салауат Галин. “Китап”. Өфө.2009.

4.”Урал батыр” эпосында һандар. Ф.Ш.Ишбирҙина. Баашҡортостан уҡытыусыһы – № 9- 2011.

5.Урал – батырҙар төйәге. Д.Р.Сафиуллина. Башҡортостан уҡытыусыһы – № 7- 2011.

6.Атай ҡото ил һаҡлар. Р.Ә.Солтангәрәева. Башҡортостан уҡытыусыһы № 12- 2011, № 1- 2012.

Өҫтәлмә әҙәбиәт:

7. С.Гәлләмов “Урал батыр” Шоңҡар - №6- 1995.

8.С.Галин. Башҡорт халыҡ эпосы. Тәбиғәт жанры. Ватандаш, № 1-1998.

9.”Урал батыр”. Фаяз Солтанов уҡый (видеояҙма)

10.Дәрестәрҙә тормош-көнкүреш лексикаһын өйрәнеү. Х.Ишбулатова. Башҡортостан уҡытыусыһы – № 2- 2003.

# Тематик планлаштырыу

| № | Темалар | Үткәреү формаһы |
|---|---|---|
| 1 | “Урал батыр” эпосы – иң боронғо эпик ҡомартҡы. | Әңгәмә |
| 2 | “Урал батыр” эпосы – тәрбиә сығанағы. | Эҙләнеү эше |
| 3 | Урал батыр төйәге. | Видеофильм ҡарау |
| 4 | Йәнбирҙе менән Йәнбикә образдары. | Түңәрәк өҫтәл |
| 5 | Урал һәм Шүлгән. | Виртуаль – сәйәхәт |
| 6 | Тәбиғәттәге бөтә тереклек берҙәм. | Әңгәмә |
| 7 | Урал юлы. | Экскурсия |
| 8 | Йәншишмә – йәшәү сығанағы. | Викторина |
| 9 | Ҡоштар батшаһы Самрау. | Әңгәмә |
| 10 | Һомай ҡош кем ул? | Фекер алышыу |
| 11 | Ҡатил батшалығы. | Викторина |
| 12 | Үгеҙ менән алыш. | Түңәрәк өҫтәл |
| 13 | Урал Ҡәһҡәһә батшалығында. | Викторина |
| 14 | Дейеү батшаһы Әзрәкә. | Характеристика төҙөү |
| 15 | Һомай һарайы. | Видеофильм ҡарау |
| 16 | Аҡбуҙат. | Виртуаль – сәйәхәт |
| 17 | Йәшәү һәм үлемһеҙлек. | Тест |
| 18 | Урал тауҙары. | Викторина |
| 19 | Нөгөш, Һаҡмар, Яйыҡ, Иҙел. | Экскурсия |
| 20 | Мәңгелек шишмәләр. | Эҙләнеү эше |
| 21 | Яҡшылыҡ – мәңгелек. | Әңгәмә |
| 22 | “Урал батыр” видеояҙмаһын ҡарау. | Видеофильм ҡарау |
| 23 | “Урал батыр”эпосының һүҙҙәрен бүлеп биреү | Сығыш яһарға өйрәнеү |
| 24 | “Урал батыр”эпосынын сәхнәләштереүгә әҙерлек эштәре | Дикция өҫтөндә эш |
| 25 | “Урал батыр”эпосынын сәхнәләштереүгә әҙерлек эштәре | Сәхнә телмәре |
| 26 | “Урал батыр”эпосынын сәхнәләштереү | Сәхнәләштереү |
| 27 | Эпоста тәбиғәт менән кешелектең мәңгелеге. | Түңәрәк өҫтәл |
| 28 | Эposты һүрәт аша сағылдырыу. | Ижади эш |
| 29 | Эпостың йөкмәткеһе буйынса ижади эштәр эшләү | Ижади оҫтахана |

| | | |
|---|---|---|
| 30 | Эпостан өҙөктө яттан һөйләү һәм сәхнәлә сығыш яһау | Конкурста ҡатнашыуға әҙерлек |
| 31 | “Урал батыр”эпосын яттан һөйләү буйынса муниципаль конкурста ҡатнашыу | Конкурста ҡатнашыу |
| 32 | Изгелек ҡылыу, яҡшы эштәр эшләү | Акцияла ҡатнашыу |
| 33 | Атай ҡото ил һаҡлар. | Викторина |
| 34 | Арауыҡ аттестацияһы. “Урал батыр” эпосы. Тест. | Тест |